# Теҙмә ҡушма һөйләмдәр (Сложносочиненные предложения)

Хажина Р.В.
302 төркөм

- Билдәле дәрәжәлә үҙ аллы булған ике йәки бер нисә һөйләмдән төҙөлгән ҡушма һөйләм **теҙмә ҡушма һөйләм** тип атала.

- **Сложносочиненными** называются ***сложные предложения***, в которых простые предложения равноправны по смыслу и связаны сочинительными союзами.

- Теҙмә ҡушма һөйләмдә бер һөйләмдән сығып икенсеһенә һорау биреп булмай.
- *Урам тынған, аяҡ аҫты туңған, йоҡа ғына күкһел ҡар ятҡан. (Р. Ғарипов)*

- Части сложносочиненного предложения между собой равноправны. Такие предложения легко перестроить в бессоюзные или разбить на два простых.
- *Прозрачный лес один чернеет, и ель сквозь иней зеленеет, и речка подо льдом блестит. (А.С. Пушкин)*

Сложносочиненные (теҙмә ҡушма һөйләм) предложения соединяются между собой сочинительными (соединительными, противительными, разделительными) союзами, интонацией.

- **Йыйыу теркәүестәре**: да-дә, ҙа-ҙә, ла-лә, та-тә, һәм, шулай уҡ, йәнә, тағы, шуның менән бергә, өҫтәүенә һ.б.
- *Бына хәҙер ат ҡуҙғалыр ҙа, Нәфисәләр бейек тау түбәһенән башҡа донъяға елдәй елеп килеп инерҙәр. (Ш. Янбаев)*

- **Соединительные союзы:** и, как…так и, да (в значении и), не только…но и, также, да и  и др.
- *Римский постарался изобразить на лице улыбку, и от этого оно сделалось кислым и злым.*

- **Каршы куйыу теркәүестәре:** ә, ләкин, тик, әммә, бәлки, иллә мәгәр һ.б.
- *Ашау ҙа бар, кейем дә бар, **тик** атай, әсәй, Дим буйҙары ғына юк шул бында. (Ф. Иҫәнғолов)*

- **Противительные союзы:** однако, но, да (в значении но), а, зато и др
- *Канонада стала слабее, **однако** трескотня ружей сзади и справа слышалась все чаще и чаще. (Л. Толстой.)*

- **Бүлеү-кабатлау теркәүестәре:** йә, йәки, әле, әллә һ.б.
- *Ҡуянтубыҡ соҡоп йөрөгән ҡыҙҙарҙың бөксәйгән арыҡ арҡаларын берсә эҫе ҡояш ҡыҙҙырҙы, берсә еүеш, һалҡын ел ҡапшаны. (З. Биишева)*

- **Разделительные союзы:** либо, или (иль), то ли…то ли, не то…не то, то…то и др.
- *Приеду по весне к в ам, либо отправлюс ь на Кавказ (К. Бат юшков)*

# Күп нөктәләр урынына кәрәкле теркәүестәрҙе ҡуйығыҙ

- Аҡыл һатыусылар күп ... аҡылды һатып алып булмай. (әйтем)
- Тәбиғәт татлы йоҡоһонан йыбанып ҡына яңы уяна, ... ҡала ситтәрендә тормош күптән башланған инде. (Б. Бикбай)
- Быуындан быуынға күсеп килгән был алышта ... һеңрәндәр отоп ҡуя, ... йәнәйҙәр еңеп сыға. (К. Мәргән)
- Был юлы Нурйән туҡталып бер кемгә лә һүҙ өндәшмәне, ... уға ла һүҙ әйтеүсе булманы. (С. Кулибай)
- Ҡояш күҙгә күренеп күтәрелә башлай, ... күк көмбәҙенә мендереп ҡуйылған ғәләмәт көслө күтәргес кран уны өҫкә табан һөйрәй. (Н. Мусин)

# Теркәүесеһеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәр

- Эҙмә-эҙ башҡарылған эш-хәрәкәт, күренештәрҙе аңлатыусы һөйләмдәр.
- Бер үк ваҡытта башҡарылған эш-хәрәкәт, күренештәрҙе белдереүсе һөйләмдәр.
- Ҡапма-ҡаршылыҡты белдереүсе һөйләмдәрҙән төҙөлгән т.т.ҡ.һ.
- Бер-береһен асыҡлаусы һөйләмдәрҙән төҙөлгән т.т.ҡ.һ.
- Бер-береһен мәғәнә яғынан дөйөмләштереүсе һөйләмдәрҙән торған т.т.ҡ.һ.